

# Ҡурай

**Мин йырларға халҡымдан өйрәндем.**
***Ғ.Әлмөхәмәтов.***


Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты гәзите
Школьная газета республиканской гимназии-интерната имени ГазизаАльмухаметова

**2020 йыл № 11(29)**
**НОЯБРЬ**


## Был һанда

**1-се бит**

**Башҡорт теле көнө**

**2-се бит**

**Беҙҙең гимназия – “Йәншишмә”лә**

**3-сө бит**

**Дистанцион уҡыу дауам итә...**

**2020 йылдың 13 ноябренән 14 декабргә** тиклем Башҡортостан Республикаһының Башлығы указына ярашлы Башҡорт теле көндәре уҙасаҡ. Үткәреләсәк сараларҙың планы ла раҫланған. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, официаль рәүештә **14 декабрь** - Башҡорт теле көнө тип, телде һаҡлау маҡсатында, республика Башлығы Р.Ф.Хәбиров 2019 йылда указы менән раҫланған. Әйткәндәй, **2020 йыл** – беҙҙең республикабыҙҙа Башҡорт теле йылы тип иғлан ителгән. **Шуға күрә газетабыҙҙың был һанын тик башҡорт телендә генә сығарырға ҡарар иттек.**

**14 декабрь** башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы асыҡ дәрестәр уҙғарыласаҡ. Шулай уҡ 9-11 класс уҡыусыларын Республика дистанцион олимпиадаһы көтә. Һеҙҙе төрлө онлайн-флешмобтар, инша конкурсы, онлайн-һүрәттәр, интернет конкурстарында ҡатнашырға саҡырабыҙ.



**2020 йылдың 11 декабрендә** барығыҙҙы ла йыл һайын уҙғарылған Мәғрифәт акцияһы “Аҡмулла диктанты” нда ҡатнашырға саҡырабыҙ.




**Бөйөк шағир**

Утыҙ икенсе йылдың
Февраль буранында
Салауат районының
Арҡауыл ауылында
Тыуған Рәми Ғарипов
Колхозсы ғаиләһендә.
Ауылында ете класс
Тамамлай Рәми башта,
Артабан дауам итә
Өфө интернатында.
Һәләтле йәш үҫмерҙе
Ебәрәләр Мәскәүгә,
Институтты тамамлап,
Сума ижади эшкә.
“Йүрүҙән” йыйынтығы
Мәскәүҙә донъя күрә,
Әҙәбиәт донъяһына
Тәүге аҙымы була.
Телебеҙ киләсәге,
Илебеҙҙең тарихы,
Милләт яҙмышы хаҡында
Рәми һәр саҡ уйланды.
Халыҡ шағиры Рәми
Йондоҙ булып балҡыны
Илебеҙҙең күгендә,
Исемен мәңгеләштерҙе
Халҡының хәтерендә.

*Ханнанова Регина, 2019 йылғы сығарылыш уҡыусыһы.*

### БАШ МӨХӘРРИР һүҙе

Ай һайын сыҡҡан мәктәп гәзитебеҙҙең уҡыусыларын сәләмләйбеҙ!

Бына кәбисә йылы (високосный год) тамаланып та килә. Дистанцион уҡыу дауам итә... Беҙ өйрәнеп, яраҡлашып та бөттөк инде уға. Шулай ҙа гимназиябыҙ; дуҫтарыбыҙ, класташтарыбыҙ менән күҙмә-күҙ ҡарашып аралашыуҙар һағындыра.

1-се ярты йыллыҡтың аҙағына тиклем күп тә ҡалманы. Бурыстарығыҙҙы барлап, ҡотолорға тырышығыҙ. Оҙаҡламай фәндәрҙән административ тикшереү эштәре башланасаҡ. Гагарин олимпиадаһы, Бөтә Рәсәй олипиадаһының муниципаль этабы, мәктәп Кесе фәндәр академияһы (МАН) алда беҙҙе көтә. Һеҙгә һаулыҡ, уңыштар теләйһе генә ҡала. Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ! Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар.

*“Ҡурай” газетаһының баш мөхәррире Хәмизуллина Мәзинә.*

*Беҙҙең гимназияла 300-ҙән ашыу уҡыусы белем ала. Улар беҙҙең республикабыҙҙан ғына түгел, илебеҙҙең төрлө төбәкҡтәренән килеп уҡыйҙар беҙҙә. Ошо темаға республикабыҙҙың “Йәншишмә” газетаһының 47-се һанында мәкәлә басылып сыкты.*



БЕҘҘӘ КҮРШЕ ӨЛКӘЛӘРҘӘН ДӘ УҠЫЙҘАР

20 ноябрь, 2020 йыл 4 Йәншишмә №47




***2020 йылдың 29 ноябрендә** илебеҙҙең төрлө региондарында **Географик диктант** уҙғарылды. Беҙҙең гимназия ла был саранан ситтә ҡалманы. 9-11 класс уҡыусылары, уҡытыусылар үҙҙәрен һынап ҡараны.*

***География уҡытыусыһы Хөсәйенов Фәнил Хөрмәт улы:*** Беҙ гимназия өсөн 120 ҡатнашыусыға урын терҡәнек. Теләгән кеше ҡатнашып, география буйынса белемдәрен тикшерә ала ине. Үҙем 2015 йылдан бирле был сарала ҡатнашам. Диктант белемдәрендә иҫкә төшөрөргә ярҙам итә (Колчак тураһында һорау бар ине, бына әле “Википедиянан” уның тураһында уҡып ултырам әле). Һорауҙарға килгәндә, килешәм, ауырыраҡ, мәктәп программаһында бөтә һорауҙар ҙа өйрәнелеп етмәй. Диктантты 20 минутта тамамланым, 2-3 һорауҙа ғына сикләндем.

***Климчук М., 9а класы уҡыусыһы:*** Диктантта тәүге йыл ҡатнаштым. Һорауҙары былай ҡыҙыҡлы ине. Икенсе өлөшөндә ҡайһы бер һорауҙар ауырыраҡ булып тойолдо. Был сарала ҡатнашыуыма үкенмәйем, сөнки үҙем өсөн күп яңылыҡтар астым.

***Назаренко Я., 10 класс уҡыусыһы:*** Был сарала ҡатнашыу – минең тәүге тәжрибәм. Һорауҙарға килгәндә, улар ауыр булды тимәҫ инем, ләкин ҡайһы берҙәре уйланырға мәжбүр итте.

***Әхмәтова Р.Р., рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Мин тәүге йыл ҡатнаштым Диктантта. Һорауҙары еңел булыр тип уйлағайным. Экспедиция, эҙләнеүҙәр менән бәйлеләре бигерәк тә ауыр булды. Һорауҙарҙы ҡыҙыҡлы тип таптым, улар география өлкәһенән генә түгел, һинең аҡыл кимәлендә төрлө яҡлап тикшергәндәре лә осраны.

*Географик диктантта барлыҡ ҡатнашыусыларға “Афарин” тип әйтке килә. Ял көнөндә ваҡыт табып, белемдәрен һынап ҡаранылар. Бөтә ҡатнашыусыларға Сертификат та ебәреләсәк.*

## Гимназия яңылыҡтары:

**2020 йылдың 13 ноябрендә** 11 кластарҙа рус әҙәбиәтенән йомғаҡлау иншаһын буйынса һынау имтиханы үткәрелгәйне, ә декабрҙә буласаҡ имтихан эпидемиологик хәлгә бәйле 2021 йылдың апреленә күсерелде.

**2020 йылдың 14 ноябрендә** онлайн форматта ZOOM платформаһында “Коронавирус инфекцияһының таралыу шарттарында профилактик саралар” темаһына дөйөм ата-әсәләр йыйылышы булды. Шулай уҡ очно-дистанцион уҡыуға ла туҡталып кителде.

**2020 йылдың декабрендә** уҡыусыларҙың Кесе фәндәр академияһы (МАН) үткәреләсәк. Барығыҙҙы ла унда ҡатнашырға саҡырабыҙ.








**Дистанцион уҡыу дауам итә...**

*Илдәге эпидемиологик хәлгә бәйле 5, 11 кластар ғәҙәти уҡыясаҡ,ә 6-10 класс уҡыусылары дистанцион рәүештә уҡыуҙы дауам итәсәктәр. Әгәр дәрес онлайн форматта булмаһа, 35 минут эсендә уҡыусыларға үҙ аллы теманы аңлап, 3 битлек теманы үҙләштереп, күнегеүҙәрҙе яҙма рәүештә башҡарып, уҡытыусыға шәхсән ебәреп өлгөрөргә кәрәк. Әгәр өлгөрмәй икән, тәнәфестә ял итмәй, эшен эшләп бөтөрөргә мәжбүр була. Ул 10 минуты ла етмәй ҡалһа, музыкаль дәрестәрҙән һуң, сәғәт киске 8-гә тиклем эшләп бөтөрөп, уҡытыусыға ебәрергә мөмкинлеге бар. Ләкин ни өсөн уҡыусыларҙың бурыстары йыйылып китә һуң? Ә инде онлайн рәүештә дәрес үтә икән, ярты сәғәт эсендә яңы теманы аңлап өлгөрөргә кәрәк, шул арала интернетың насар булһа, уҡытыусының ярты һүҙе ишетелмәй, "сығып та осорға" мөмкин конференциянан. Шунан дәрес тамамланғансы кире керергә маташаһың әле. Теманы ла аңламаның, дәрестә эшләйәсәк эштәрең дә эшләнмәне, өҫтәүенә класс етәксең менән тәрбиәсең һине битәрләй онлайн-дәрескә кермәгәнең өсөн...*

*Икенсе яҡтан ҡараһаң, өйҙә яҡындарың эргәһендә, береһе лә камасауламай, ата-әсәйең дә ярҙам итеп ебәрә. Дистанцион уҡыуҙың нисек барғанлығы тураһында гимназиябыҙ уҡыусыларына, ата-әсәләргә һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.*

- ***Һеҙгә гимназияла уҡыу бәхете тейҙе. Дистанцион уҡыумы, әллә ғәҙәти уҡыу яҡшыраҡмы?***

**5 класс уҡыусылары:** Әлбиттә ғәҙәти уҡыу, сөнки беҙгә уҡытыусылар яҡшы итеп аңлата, класташтарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ менән аралаша алабыҙ, ял итергә лә ваҡытыбыҙ ҡала. Ә дистанцион уҡыу ваҡытында көнө буйы дәрес әҙерләп, телефон артында үтә ине көнөбөҙ.

- ***Ҡайһы фәндәр буйынса бигерәк тә өйгә эш күп итеп бирәләр?***

**6 класс уҡыусылары:** Математика, тарих, биология, рус теле, рус әҙәбиәте.

- ***Һеҙгә онлайн уҡыуы оҡшаймы, әллә электрон кейстар буйынсамы?***

**7 класс уҡыусылары:** Онлайн-дәрестәр нығыраҡ оҡшай, сөнки уҡытыусы бөтә кәрәкле мәғлүмәтте дәрестә бирә. Аңлашылмаған урында һорау ҙа биреп була. Үҙеңде дәрестә ултырған кеүек хис итәһең. Класташтарыңды күргәндәй булаһың.

- ***Уҡытыусыларға ниндәй үтенесегеҙ бар дистанцион уҡыу буйынса?***

**8 класс уҡыусылары:** Эштәрҙе платформаларҙа бирмәһендәр ине. Дәреслектән күнегеүҙе эшләп, фотоға төшөрөп ебәрһәк, яҡшыраҡ булыр ине. Минең күҙҙәрем насар күрә башланы. Ярҙам һорап мөрәжәғәт итһәк, ярҙам итергә гел әҙер булһындар, электрон кейстар ғына ебәреп, онлайн дәрестәр үткәреү тураһында ла онотмаһындар ине.

- ***Йомғаҡлау әңгәмәһенә, имтихандарға әҙерлек нисек бара?***

**9 класс уҡыусылары:** Әҙерлек бик бармай әле. Уҡытыусыларһыҙ ҡыйын әҙерләнеүе. Гимназияла уҡып әҙерләнһәк, яҡшыраҡ булыр ине, тип уйлайым.

- ***Дистанцион уҡыуҙың ыңғай һәм кире яҡтарын атағыҙ.***

**10 класс уҡыусылары:** Кире яҡтары: уҡытыусылар һәм класташтар менән "тере" аралашыу юҡ, интернет ҡайһы саҡта күңелде ҡыра, гел телефон, монитор алдында ултырып, һаулыҡҡа зыян килә, шулай уҡ өйҙә уҡыу атмосфераһы юҡ. Күсерергә күп эштәр бирәләр. Уҡыуҙан башҡа өй эштәре лә (ҡыҙҙарҙың бигерәк тә күп) бар бит, өлгөрөп булмай.

- ***Йомғаҡлау иншаһына һәм имтихандарға әҙерлек нисек бара?***

**11 класс уҡыусылары:** Әҙерлек бара. Гел вебинарҙарҙа беҙ. Йомғаҡлау иншаһын апрелгә күсергәс, күптәребеҙҙең кәйефе ҡырылды, ҡотолоп ҡуйыр инек... Гимназияла уҡыу атмосфераһы бар, шуға ялҡауланмай, бик ҡаты имтихандарға әҙерләнәбеҙ.

- ***Ни өсөн уҡыусыларҙың бурыстары йыйылып китә һуң?***

**6 класс уҡыусыһының әсәһе:** Бик тырышҡанда, интеренетың яҡшы булһа, эштәреңде ваҡытында ебәреп була. Ләкин күп уҡыусылар талыҡһыранылар (расслабились). Ата-әсәләргә балаларын контролдә тоторға, ҡатыраҡ булырға кәрәктер, тип уйлайым.

*Төрлө яуаптар... Төрлө ҡараштар... Ә 1-се ярты йыллыҡ тамамланып, баһалар сығарырға күп тә ҡалманы. Электрон журналдағы буш шаҡмаҡтар күбәйгәндән-күбәйә... Оҙаҡламай ғәҙәти уҡыуға күсербеҙ тигән өмөттә ҡалабыҙ...*









КУБОК ГАГАРИНА

График проведения
Республиканской олимпиады школьников
на Кубок имени Ю.А. Гагарина
в 2020-2021 учебном году

| ШКОЛЬНЫЙ ЭТАП | | | |
|---|---|---|---|
| № | Предмет | Классы | Дата проведения |
| 1 | Физическая культура | 1-8 | 7 – 21 декабря 2020 (по графику школы) |
| 2 | Информатика | 2-8 | 7 декабря 2020 (Пн) |
| 3 | Английский язык | 5-8 | 8 декабря 2020 (Вт) |
| 4 | Полиолимпиада | 1 | 10 декабря 2020 (Чт) |
| 5 | Обществознание | 6-8 | 10 декабря 2020 (Чт) |
| 6 | Окружающий мир | 2-4 | 11 декабря 2020 (Пт) |
| 7 | Биология | 5-8 | 11 декабря 2020 (Пт) |
| 8 | Музыка | 4-8 | 12 декабря 2020 (Сб) |
| 9 | Астрономия | 5-8 | 12 декабря 2020 (Сб) |
| 10 | Русский язык | 2-8 | 14 декабря 2020 (Пн) |
| 11 | География | 5-8 | 15 декабря 2020 (Вт) |
| 12 | Математика | 2-8 | 16 декабря 2020 (Ср) |
| 13 | История | 5-8 | 17 декабря 2020 (Чт) |
| 14 | Литература | 2-8 | 18 декабря 2020 (Пт) |
| 15 | Физика | 7-8 | 19 декабря 2020 (Сб) |
| 16 | Башкирский язык | 5-8 | 21 декабря 2020 (Пн) |
| 17 | Немецкий язык | 5-8 | 21 декабря 2020 (Пн) |

## Ноябрь айы ниндәй иҫтәлекле көндәре менән иҫтә ҡалды?




Был байрам Ватаныбыҙ тарихындағы данлы ваҡиға – 1612 йылда Минин һәм Пожарскийҙың халыҡ ополчениеһы тарафынан Мәскәүҙе сит ил баҫҡынсыларынан азат итеү, бойондороҡһоҙ Рәсәй дәүләтселеген тергеҙеү хөрмәтенә булдырылды.




**Әсәйҙәр көнө** – Халыҡ-ара байра. Төрлө илдә уны төрлө көндә байрам итәләр. Рәсәйҙә ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһендә байрам ителә. Иң яҡын кешеләренә балалары, байрам менән ҡотлап, бүләктәр бирә: һүрәт төшөрә, шиғыр яҙа, үҙ ҡулдары менән бүләк яһай.

**ҠОТЛАЙБЫҘ!**

*** 7 б класс уҡыусыһы Хәйруллина Элинаның йәмғиәттән Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһының муниципаль этабында ПРИЗЕР булыуы менән ихлас ҡотлайбыҙ! (Уҡытыусыһы: Исламғолова И.Р.)**

**** X Республика балалар интернет-конкурсы “Башҡортостан ҡоштары”, Республика көнөнә арналған һүрәттәр һәм викториналар конкурстарында актив ҡатнашҡан 6б класы уҡыусыларын ҡотлайбыҙ! (Етәкселәре: Ишдәүләтов М.Р.)***

**“Йәншишмә” гәзите үҙенең яҙылыусылары араһында уйын уйната. Төп приз – 21 тиҙлекле велосипед! Шулай уҡ саң һурҙырғыс, мультиварка уйнатыласаҡ.**




***Ял итеп алайыҡ: ошо ҡуяндар араһынан себеште табығыҙ.***



**Декабрҙә иҫтәлекле ваҡиғалар:**

**10 декабрь – Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 130 йыл.**

**12 декабрь – Рәсәй Конституцияһы көнө.**

**14 декабрь – Башҡорт теле көнө.**

**24 декабрь – Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнө.**

**31 декабрь – йылдың иң һуңғы көнө.**


| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Ғ.Әлмөхәмәтов ис. ДББО РГИ<br>Өфө, Зорге ур. 25/1<br>Тел. 24-08-10<br>Гимназияның сайты:<br>**гбоурги.рф** | Сығарылыш өсөн яуаплы:<br>башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы<br>Хоҙайбирҙина Гүзәл Зөлфәр ҡыҙы. | Баш мөхәррир:<br>Хәмизуллина Мәзинә<br><br>Корректор:<br>Мещерякова Александра | Редколлегия:<br>Байғужина Зөлифә,<br>Хәҙимуллина К.,<br>Мещерякова А.,<br>Солтанова Н.,<br>Вәлиева Э.,<br>Фәтихова Ы. | Сығарылыш датаһы:<br>30.11.2020 г.<br>Тираж:<br>газетаның эл.варианты гимназия сайтында |